ПУБЛИЦИСТИКА

КОНКУРС ЭШКЫУАР ЧЕЛОВЕК ДЕЛА Ватандаш

*Тамара ЮЛДАШЕВА*

# Камиллыҡтың сиге юҡ

**Очерк**

— Мин һеҙҙең менән партнерҙарса мөнәсәбәттә ҡалырға теләр инем. Һеҙҙең дә, үҙемдең дә кәйефте ҡырғы килмәй. Хеҙмәттәшлек итеү юлдарын эҙләйем. Ә инде юҡ икән — конкуренттарығыҙға мөрәжәғәт итергә тура килер, — тип ҡәтғи генә өҙҙө лә һөйләшеүҙе Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы, телефон трубкаһын һалды.



*Минзәлә Фазлетдинова*

Түңәрәк йөҙөнән мөләйемлек, яғымлылыҡ бөркөлөп торһа ла, ҡарашында һынсыл талапсанлыҡ, ҡыйыу фекер йөрөтөү кеүәһе сағылып ҡалған урта йәштәрҙән саҡ ҡына өлкәнерәк ханым үҙ алдына ҡарап уйланып ултырҙы. Эйе, ҡайһы берҙә үҙ эшеңде еренә еткереп башҡарһаң да, хеҙмәтеңдең бик күп кешеләргә бәйле булыуы арҡаһында тотҡарлыҡ килеп тыуа. Шундай саҡтарҙа үҙеңде лайыҡлы тота белергә, улай ғына ла түгел, эш мәнфәғәтенән сығып, төрлө килешеүҙәргә барырға тура килә. Ләкин иң мөһиме үҙ йөҙөңдө юғалтмауҙыр. Серҙәрҙең дә сере — кешеләр менән аралашыу сере. Ғилемдәрҙең дә ғилеме аҡыллы етәксе булыу икән.

Ул етәкләгән «Румикс» фәнни-етештереү фирмаһы Өфө ҡалаһында 1991 йылдан уҡ эшләп килә. Нефть һәм газ сәнәғәте өсөн торба үткәргестәрҙең эсен таҙартыу ҡорамалдары әҙерләнә бында, ябай ғына итеп әйткәндә.

Әлбиттә, ҡатмарлы фәнни эҙләнеүҙәр ҙә, тәжрибә лә талап иткән өлкәлә алдан барыу еңелдән түгел. Предприятиеның заказсылары ғына

ни тора: магистраль нефть үткәргестәрен эксплуатациялаусы «Транснефть» акционерҙар йәмғиәте, продукт үткәргестәрҙе эксплуатациялаусы «Транснефтепродукт» акционерҙар йәмғиәте предприятиелары, «Сургутнефтегаз», «Сибнефть», «Коминефть», «Северная нефть», «Роснефть» компаниялары, «Газпром» предприятиелары һ.б.

Шуныһы ҡыуандыра, предприятие сығарған продукция күләме йылдан-йыл арта. Эшселәр һаны ла күбәйә: эш хаҡы һәйбәт, ял итеү өсөн шарттар булдырылған. «Ун биш йыл эсендә күрелде инде, — тип фекерен дауам итте директор Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы. — Белгестәрҙе башта ситтән саҡырҙыҡ, майҙандарҙы арендаға алдыҡ. Партнерҙарҙың аҡса күсермәүе лә, эшһеҙ ултырыу ҙа булды. Әммә предприятиены яйға һалырға тырыштыҡ — бина һатып алып, ремонтлап, поролон етештереү цехы проектына заказ бирҙек. Кеҫәгә аҡса тултырып ултырыуҙы маҡсат итеп ҡуйманыҡ беҙ, ә продукцияның үҙкиммәтен төшөрөүгә көс һалдыҡ. Тауарға хаҡ күтәреү өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, ә һин бына баҙар шарттарына лайыҡлы яраҡлаша бел, конкуренцияға бирешмә, кәрәкле материал етештер, яңы эш урындары булдыр. Эшҡыуарлыҡта, башҡаларҙан айырмалы буларaҡ, етештереү өлкәһен һайлап дөрөҫ эшләнек».

Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы кабинетынан сығып тышҡы ишеккә табан йүнәлде, коридорҙа кемдер осрап, нимәлер хаҡында кәңәш һорағас, иғтибарлап тыңлап, яуабын әйтте лә урамға атлыҡты.

Аһ, ниндәй саф һауа, яҡты донъя! Йымылдай-йымылдай күктән апаҡ ҡар бөртөктәре яуа. Изге, пак хистәр яуалыр, бәлки? Ана, баласаға боҙ тауынан шыуғалаҡ яһап шыуа, бар тирә-яҡ уларҙың сыр-сыу тауыштарына күмелгән. Эргәнән ауыр пакеттарын ике ҡулына күтәргән ҡатындар өйөнә ҡабалана. Иңбаштары төшкән, ҡараштары ергә төбәлгән. Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы, яурындарын яҙылдырып, арҡаһын турайтып атлап китте лә эсенән генә:

Сыҡтым мин ап-аҡ ҡарҙарҙан,  
Сыҡтым нәфис яҙҙарҙан,  
Бешкән көҙҙән, урмандарҙан,  
Мәңге йәшел ҡарағайҙан, —

тип ҡабатланы. Ауырлыҡты күтәргән көйө лә еңел атларға мөмкин. Иң мөһиме — уйҙарыңа башҡа йүнәлеш биреү.

Уй-фекер ҡеүәһенең, рух көсөнөң тормошобоҙға ғәйәт ҙур йоғонто яһауы хаҡында хәҙер күп яҙалар. Кешенең уйы шул тиклем ҙур көскә эйә — бөтөн яҙмыш ауырлыҡтарын еңә, маҡсатҡа ла өлгәштерә ул. Балаларса хыяллана белеү оҫталығын ғүмер буйына һаҡларға кәрәк.

Хыял тигәндән, ниндәйҙер матди әйбер хаҡында хыялланғанын хәтерләмәй Минзәлә. Уның уй-теләге бәләкәйҙән уҡыу, белем алыу, һөнәргә өйрәнеү, камиллыҡҡа ынтылыу менән бәйле булды.

Тормошомдан уңдым, тип әйтә ала ул. Шундай тәрбиәле ғаиләлә тыуып үҫте. Өләсәһе намаҙ уҡып, Ҡөрьән сыға ине. Эшсәнлек, сабырлыҡ, башҡаларға ихтирамлылыҡ — уның яғынан килгән сифат-

тар. Өләсәһе өйрәткән «Ҡолһуалла» һуңынан, өлкәнәйгәс тә, Минзәләгә күпме ярҙам итте! Төрлө хәлдәр килеп тыуһа, ҡурсаланы. Әсәһе изге бер йән ине. Ғәлиә ине исеме. Был донъянан киткәненә инде 10 йыл. «Ғәлиә» ғәрәпсә «бөйөк» тигәнде аңлата. Ул һәр ваҡыт йылмайып һөйләшер, кешеләргә изгелек эшләргә әҙер торор, һәр кемдең һәйбәт яғын күреп, иғтибар итер ине. Йырлап ебәрһә, тауышына һәр кем һоҡланыр, бөтә донъя тынып ҡалғандай булыр ине. Минзәләгә уның тауышында шишмә сылтырағаны ишетелгәндәй тойола торғайны. Балалары күп булыуына ҡарамаҫтан, әсәһе өйҙө лә, сабыйҙарын да бик бөхтә тотто. Ҡулдан тегеп күлдәк кейҙерҙе. Икмәк булмаһа, тиҙ генә «йоҡа» бешерҙе, балаларын ас-яланғас итмәне. Сабыйҙарының теләген ихтирам итте: Минзәлә, Өфөгә интернатҡа уҡырға барам, тигәс, ризалыҡ бирҙе.

Әле лә иҫендә Минзәлә Вәлиулла ҡыҙының: Әлшәй район үҙәге менән тыуған Сурай ауылы араһындағы һигеҙ саҡырымды осоп ҡына үттеме ни! Өфөгә, уҡырға уны ебәрәләр!

Хәҙер былай тип тә уйлап ҡуя: шул тиклем дә ашҡыныуы, талпыныуы яҙмыш саҡырыуын тойоуҙан булғандыр! Ғөмүмән, ул һәр ваҡыт йөрәге ҡушыуына буйһоноп йәшәне, һәм шул уны ауыр ваҡыттарҙа ҡотҡарғандыр ҙа.

Эйе, эйе... яҙмыш ҡушыуы... Шишмә башы ҡайҙа әле? Әлбиттә, яратҡан мәктәбендә! Өфөләге Республика интернат-мәктәбе Минзәләне һөйөп ҡаршыланы, яҡшы тәрбиә бирҙе. Таңһылыу Хашим ҡыҙы Күсимова, Лениза Абдулла ҡыҙы Хәсәнова, Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова, Софья Ҡотдос ҡыҙы Әхтәмова биргән дәрестәр, ысын-ысындан тормош һабаҡтары ғүмергә хәтергә уйылған. «Әҙәм балаһын Хоҙай үҙе етәкләп йөрөтөп, олуғ дәрестәрен бирәлер ул, — тип тә һығымта яһай Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы. — Ул һәр ваҡыт минең янымда «аҡ» йәки «ҡара» уҡытыусылар — остаздар булыуын хәстәрләгән. Төрлө яҙмышлы кешеләр, тормошта килеп тыуған хәл-ваҡиғалар, һынауҙар, хатта бөйөк Тәбиғәт үҙе һәр мәлендә нимәгәлер өйрәтә һымаҡ. Терәктәрем — тыуып үҫкән ғаилә, мәктәбем, үҙем ҡорған ғаилә — миңә һис бер нәмәгә бирешмәҫкә көс өҫтәгәндер».

Уҡытыусыларына рәхмәт тойғоһон ғүмере буйы йөрәгендә йөрөтә Минзәлә Фазлетдинова. РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы Лениза Абдулла ҡыҙы менән тормош иптәше Миҙхәт Кашаф улының алтын туйын тантаналы һәм онотолмаҫлыҡ итеп үткәреүҙә Ҡадурий менән уның да өлөшө бар.

Камиллыҡтың сиге юҡ тигәндәй, 55 йәше үткәс, Минзәлә, интернат йылдарын хәтерләп, Виләүә Ғилми ҡыҙынан бейеү дәрестәре алмаһынмы? Күптәнге хыялы тормошҡа ашты. Виләүә Ғилми ҡыҙы өйөнә килеп, көй ҡуйып, тыпырларға, кәүҙәне тоторға өйрәтте. Өс ай тигәндә яңы бейеү һалдылар. Иптәше Ҡадурий ҙа ҡушылып китте. Бер Яңы йыл кисәһен коллектив менән ресторанда үткәргәйнеләр. Минзәлә менән Ҡадурий бейеп киткәс, бөтәһе лә аяғөҫтө баҫып ҡарап торҙо. Йәштәр ҙә бейеү өйрәнергә дәртләнде. Башҡаларға шундай ҙур күтәрен-

келек бирҙе был аҙым. Ә бит етәксе кешенең һәр ваҡыт яңы сифаттар, яңы ҡыҙыҡлы белемдәре менән коллектив алдында асылыуы бик мөһим. 8 март байрамы алдынан Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы ҡатын-ҡыҙҙар менән саунаға барыуҙы йола итеп алған. Бассейнда йөҙөп, үҙ-үҙеңде ҡәҙерләп алыу бик һәйбәт! Шул саҡта ул баяғы ҡарҙар, яҙҙар, ҡарағайҙар тураһындағы шиғырҙы уҡый.

— Кем яҙған, тип һорашалар. Уға ун ике йәш тулған ваҡытта, Белоретта йәшәгәндә, поезд аҫтына эләгеп, ике аяҡһыҙ ҡала. Шуға ҡарамаҫтан, мәктәпте бишлегә тамамлай. БДУ-ла физика-математика факультетында уҡый. Шиғырҙар яҙа башлай. Үҙе ғалимә. Шундай кеше менән миңә дуҫ булырға тура килде. Беҙ бер-беребеҙҙе яҡшы аңлайбыҙ. Уның китабын мин дуҫ-иштәремә, ҡәрҙәштәремә бүләк иттем. Шул саҡлы рухи көс! Беҙ теләһәк — йүгерәбеҙ, йөҙәбеҙ. Ә ул мәхрүм. Әммә уның йөрәк көсө хайран ҡалдыра, — тип һөйләй Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы әхирәте Мөнирә Фәрәхетдинова тураһында.

Өфө авиация институты студентҡаһы Минзәләгә лә 21 йәшендә рух көсөнә ҙур һынау тоторға тура килә. Йәш саҡ дәртле саҡ бит, Яңы йылды урманда ҡаршыларға баралар. Ләкин бәлә ағас башынан түгел, кеше башынан йөрөй. Нисектер уңайһыҙ йығылып, умыртҡаһын һындыра ҡыҙыҡай. Уны носилкала алып ҡайталар. Республика дауаханаһында кәүҙәһен тарттырып һалып ҡуялар. Ҡулдары, аяҡтары йөрөмәй. Шулай, сир менән көрәшеп ятҡанда, Өфө нефть институтында уҡып йөрөүсе бер төркөм синыфташ егеттәре килеп инә. Улар араһында электән Минзәләгә күҙе төшөп йөрөгән Ҡадурий ҙа бар. Мыҡтыланып, матурайып киткән. Бына һиңә мә, был юлы Минзәлә үҙе уға ғашиҡ булды! «Йүнәлеп сыҡһам ошонан, ул минеке буласаҡ!» тип сәмләнеп уйланы ҡыҙ. Ошо сәм, алға әйҙәүсе һөйөү уға дауахананы тиҙ ваҡытта ҡалдырып, үҙенең курсында уҡыуын дауам итергә көс бирҙе. Ҡадурий менән өйләнештеләр. Иптәше уға ғүмер буйы һаҡсыл мөнәсәбәттә булды, ҡурсаланы, әммә өйҙә бикләп тә ултыртманы. Тәүге улдары Азамат тыуғас, үҙе ҡараны. Институттан һуң Өфөлә ун йыл эшләп, фатир алғас, Төмән өлкәһенә киттеләр. Унда икенсе улдары Ринат тыуҙы.

Донъяла иң ҡәҙерле нәмә таҙалыҡ икән ул. Бөтөн байлыҡ — ул һаулыҡ. Өҫтәлдә икмәк менән май бар, Аллаға шөкөр. Нимәнелер алыу теләге менән янманы Минзәлә. Ялды ойоштора белде. Иптәше Ҡадурий 12 сәғәт эшләй, ә ҡатын кешегә улай килешмәй, өйҙө лә алып барырға кәрәк. Йәшәй-йәшәй Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы шул хәҡикәткә ныҡлап төшөндө: ғаиләлә бер-береңде рухи байытыу даими барырға тейеш. Мөхәббәт — гөл һымаҡ, уны наҙлап тәрбиәләргә кәрәк. Һыу һипмәһәң, ҡояш нурынан ҡаплаһаң, ул һулый йә бик сибек булып үҫә. Ир-егетте гел үҙ ыңғайыңа бөгөргә тырышыу дөрөҫ түгел. Уның яҡшы сифаттарын ҡеүәтләргә, көс бирергә кәрәк. «Ҡатын-ҡыҙ — өй тотҡаһы, ир-ат — ил тотҡаһы», тиҙәр бит. Балалары һәйбәт кеше булып үҫһен тип тырышты. Улар менән бергә Тәүрат, Инжил, Ҡөрьәнде өйрәнде. «Диндәрҙең тамыры бер үк, — ти Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы.

— Ҡөрьән — камиллаштырып бирелгән китап, ул бөтә халыҡтарға ла тәғәйенләнгән булған. Ләкин уны бөтә кешелек алмаған, изге китап итеп беҙ алғанбыҙ».

«Шәхси эш асыуға һеҙҙе нимә этәрҙе? — тип һорай унан ҡайһы берәүҙәр. — Рухи тормош менән генә йәшәмәйенсә?..»

Яратҡан һөнәрең һәм рухи байлыҡ — улар бер-береһенән айырылғыһыҙ, тип иҫәпләй Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы. Ҡадурий Әбдрәхим улы торба үткәргестәр төҙөү буйынса Бөтә Рәсәй ғилми-тикшеренеү институтының Көнсығыш филиалын Өфөлә асты. Минзәләгә «Румикс»ты етәкләргә тәҡдим итте. Бер-ике аҙна уйланды ла ҡарарға килде көслө рухлы ҡатын: эште ойоштора, һалым инспекцияһы менән эш итә, кешеләр менән мөғәмәлә ҡора белә. Был — иң мөһиме. Ышаныс менән предприятие асып ебәрҙе. Һәм отолманы.

Ә инде рухи тормошҡа килгәндә, ҡулында көсө барҙың хәрәкәттәре лә һәлмәк. Әйтәгүр, Себерҙән ҡайтҡас, күп кешегә матди ярҙам күрһәттеләр Фазлетдиновтар. Әммә йыһан ҡанундары икенсе: әҙәм балаһына рухи ярҙам кәрәк. Шуны аңланылар улар.

Ҡадурийҙың ниәте бар ине: тыуған ауылы Рафиҡта атаһына исемләп мәсет һалдырыу. Ғаиләлә ултырып һөйләшеп, балалар ризалыҡ биргәндән һуң, был изге эш Минзәлә Вәлиулла ҡыҙына йөкмәтелде. Күпме йоҡоһоҙ төндәр, уй-хыялдар, ойоштороу, кәрәк-яраҡты табыу, килтереү, бригада яллап төҙөү эштәре — бөтәһе ошо оло йөрәкле ҡатын иңендә. Ауыл кешеләрен йәлеп итеп, мәсет һалыуҙы дөйөм эшкә әйләндереүе — үҙе бер мәртәбә.




«Был изге йортта йылы булырға тейеш, — ти ул. — Кешеләр килеп, күңеле сафланып, илаһи нурҙарға байып китерлек булһын». Аллаға шөкөр, был йорттан таралған аҙан моңдары, унда даими уҡылып торған Ҡөрьән аяттары ауылдың микроклиматын да яҡшыға үҙгәртә. Халыҡ Фазлетдиновтарға рәхмәтле. Мәсеттән кеше өҙөлмәй.

...Илгәҙәк ҡар бөртөктәре керпеккә, иренгә ултыра. Ниндәй камил улар, ә иреп юҡҡа сығыуҙан ҡурҡмайҙар. Моғайын, улар был донъяла бөтә нәмәнең бөйөк бер әйләнештә, даими үҙгәреүсе бәйләнештә булыуын беләләр.

Донъяға, кешеләргә яратып бағыусы, үҙе лә сикһеҙ мөхәббәт

менән солғанған Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы ошо олуғ ҡанунға буйһоноп йәшәй. Уңыштары ла — күңел ҡаҙаныштары улар. «Ҡатын-ҡыҙ — йыл директоры» тип аталған Бөтә Рәсәй конкурсында лауреат булыуы быға асыҡ дәлил. Ул — Өфө ҡалаһының Орджоникидзе районы эшҡыуарҙар советының актив ағзаһы.


*«Сифат тажы» халык-ара призы*

Уҙған йылдың декабрь айында Минзәлә Фазлетдиноваға, «Румикс» фәнни-етештереү фирмаһы директоры булараҡ, Халыҡ-ара Сифат Конвенцияһында ҡатнашыу бәхете тейҙе. Был мөһим Конвенция Великобританияла Лондонда үтте. Унда 67 илдең 90 компанияһы үҙ эшен күрһәтте. Рәсәйҙең 315 фирмаһы араһынан «Ҡатын-ҡыҙ эшҡыуарҙар ассоциацияһы» тәҡдим иткән 4 предприятие ла һайлап алынғайны.

«Business Initiative Directions» (B.I.D.) тип аталған ойошманың юғары бүләге — «Сифат тажы» халыҡ-ара призын ҡабул итеп алды Минзәлә Фазлетдинова. Был приз үҙ эшен сифатлы алып барған, клиенттары һәм партнерҙары менән камил мөнәсәбәттәр ҡорған предприятиеларға уларҙың мәртәбәһен арттырыу һәм сифат культураһын алға этәреү маҡсатында тапшырыла.

B.I.D. ошондай бүләк менән бынан алдағы йылдарҙа Парижда Рәсәй Үҙәк банкыһының элекке президенты, РАО «ЕЭС России» компанияһының директорҙар советы вице-президенты Сергей Дубининды, атаҡлы дизайнер Вячеслав Зайцевты билдәләгән булған. Әйткәндәй, ойошманың Франкфуртта, Женевала, Парижда, Нью-Йоркта һәм Лондонда тапшырған призлары бер-береһенән тышҡы күренеше менән айырыла, әммә бер үк маҡсатҡа йүнәлтелгән: донъяла бизнес мәҙәниәтен юғары кимәлгә күтәреү. Рәсәйҙә был призды алыусылар булһа ла, беҙҙең Башҡортостанға халыҡ-ара «Сифат тажы» тәүге тапҡыр килде. Яңы өмөттәргә яуаплылыҡ хисе лә өҫтәлеп, ҡанатланып ҡайтты Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы.

Камиллыҡҡа ынтылыш тағы юлға әйҙәне — был юлы Ғәрәбстанға, Мәккәгә... Изге Ҡәғбә ташына доға ҡылып, хажиә булараҡ ҡайтасаҡ был сәфәренән. Рухи үҫешкә, юғары кимәлгә тартыла Минзәлә Фазлетдинованың мөхәббәтле булмышы.